**Сәйфетдинов Илмир Зиләүер улы** 1993 йылдың 10 майында Башҡортостан Республикаһының  Ауырғазы районы Усман ауылында тыуған.

2001 йылда Илмир Усман төп мәктәбенең 1-се класына уҡырға бара. Был мәктәптә ул 9-сы класты тамамлағансы тик яҡшы билдәләргә генә уҡый.  Ул бәләкәйҙән үк спорт ярата,мәктәптә үткән спорт ярыштарында әүҙем ҡатнаша.

2010-2011 уҡыу йылдарында Илмир уҡыуын күрше Төрөмбәт ауылының урта мәктәбендә дауам итә, унда 10-11-се кластарҙа белем ала.

2011 йылда Илмир Өфө ҡалаһына эшкә китә. 2013 йылда ул өйләнә һәм өс малайға атай була.

Илебеҙҙә өлөшләтә мобилизация иғлан ителгәс, 2023 йылдың 12 июлендә Илмир Зиләүер улы бер уйлап та тормайынса, икеләнмәйсә Ватанды һаҡларға китә. Ул үҙенең бурысын аңлай һәм иленең именлеге өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә ала.

2024 йылдың 1 майында Луганск өлкәһендә барған ҡаты һуғышта Илмир ауыр яралана һәм батырҙарса һәләк була. Ул аҙаҡҡаса Ватанына тоғро ҡала һәм хәрби бурысын намыҫ менән үтәй.

2024 йылдың 10 майында, Илмирҙың тыуған көнөндә, уның кәүҙәһен тыуған ауылы зыяратына алып ҡайтып ерләйҙәр. Уның үлеме менән ауылдаштары, туғандары һәм яҡындары ҙур ҡайғы кисерә. Үлгәндән һуң, Илмир Зиләүер улы **“Генерал Шайморатов”** ордены һәм **“Батырлыҡ өсөн”** ордены менән бүләкләнә. Был наградалар — уның Ватан алдындағы батырлығын һәм хеҙмәтен таныу билдәһе.